**29.11.10.** **Башҡорт теле . 4 класс**

**Тема. Исем һүҙ төркөмөн ҡабатлау.**

**Маҡсат.**

1. Исем һүҙ төркөмөн ҡабатлау, тема буйынса белемдәрен тикшереү, нығытыу.

2. Уҡыусыларҙы дөрөҫ, грамоталы яҙырға, логик фекер йөрөтә белергә, исем һүҙ төркөмөн яҙма һәм һөйләү телмәрендә ҡулланылырға өйрәтеү.

3. Башҡорт телен өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу уятыу, көҙгө тәбиғәтте күҙәтеү, һоҡланыу хисе тәрбиәләү.

**Йыһаздар.** Дидактик карточкалар,

Дәрес барышы.

**I. Ойоштороу өлөшө.**

- Бөгөн беҙҙә башҡорт теле

Яратам һине телем.

Рәхмәт һиңә! Һинең аша

Алам мин яҡшы белем.

- Бер-берегеҙгә ҡарап йылмайыу бүләк итәйек һәм дәресебеҙҙе башлап ебәрәйек.

**Матур яҙыу минуты.**

-Бөгөн беҙҙә ҡунаҡта [ ө ] өнө. Был ниндәй өн тураһында нимәләр беләһегеҙ? Бирелгән һүҙҙәр араһынан предметты белдергән һүҙҙәрҙе генә һайлап яҙығыҙ. (зәңгәр, һабын, үҫә, осорта, арыҫлан, яуа, болан, шаҡмаҡлы, ағай)

- Ни өсөн был һүҙҙәрҙе һайлап яҙҙығыҙ? (кем, нимә һорауына яуап бирә, предметты белдерә)

2-се зат минең ҡалам беҙҙең ҡалабыҙ
3 –сө зат уларҙың ҡалалары һеҙҙең ҡалағыҙ

- Афарин. Өсөнсө йоҙаҡты асыу **өсөн йомаҡтың яуабын табайыҡ.**

Ағас баштары булды һап-һары,
Япраҡ көслө елдәрҙә өҙөлөп ергә түгелде.
Был ҡайһы ваҡыт? (Көҙ)
**Картина буйынса әңгәмә.**
Көҙ етеүен беҙ ҡайҙан беләбеҙ?
Көҙгө айҙарға ниндәй айҙар инә?
Китаптан 85-се күнегеүҙе уҡыйыҡ. (тексты ҡысҡырып уҡыу).

а) Берлектәге исемдәрҙе күсереп алып килеш ялғауҙары аҫтына һыҙырға;
б) Күплектәге исемдәрҙе күсереп яҙып килеш ялғауҙары аҫтына һыҙырға;
в) Эйәлек ялғаулы исемдәрҙе күсереп яҙырға, ҡайһы зат, һан икәнен билдәләргә;
- Тағы бер йоҙаҡ асылды.

**Физминутка.**

*Ел сыҡты. (ҡул менән күрһәтеү)*
*Ямғыр яуа.(тыпырлау)*
*Ҡояш сыҡты.(ҡулды йәйеп күрһәтеү)*
*Төн етте.(күҙҙе йомоу).*
*Торогоҙ, торогоҙ көн тыуҙы, эштәр башланды.*

- Алтынсы йоҙаҡты асҡансы исемдәрҙең **килеш менән үҙгәреүен** иҫкә төшөрәйек.(Таблица). Хәҙер таҡта янына Лиана сыға һәм диңгеҙ һүҙен килеш менән үҙгәртә, ә ҡалғандар арыш һүҙен үҙгәртә.

- Беҙҙең йоҙаҡтарыбыҙ ҙа әҙ генә ҡалды. Алдағыһын асыр өсөн һеҙҙән иғтибар талап ителә. Түбәндәге **исемдәрҙең парҙарын**

**II. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау.**

- Бирелгән хәрефтәр араһынан яңғырау тартынҡы өндәрҙе уйығыҙ менән генә алып ташлағыҙ һәм һеҙ үҙегеҙгә таныш булған һүҙ төркөмөн уҡырһығыҙ.

*ВГИЖЗСЛГЕДРМ*

-Ниндәй һүҙ төркөмө килеп сыҡты? (исем) Бөгөн беҙ морфология иленә ҡунаҡҡа – исем һүҙ төркөмөнә барабыҙ. Ләкин уны яуыз сихырсы ҡат-ҡат йоҙаҡтар менән биклəп киткән. Беҙ уға ярҙам итәргә тейешбеҙ. Беренсе йоҙаҡты асар өсөн ундағы биремде үтәйек.

**А) Уйын. Серле таждар.** Таҡтала эленгән сәскәләрҙең таждары серле. Уларҙың артында һорауҙар яҙылған (балалар сиратлап үҙҙәре теләгән тажды алып һорауға яуап бирәләр)

1. Исем тип ниндәй һүҙ төркөмөнә әйтәләр?

2. Исемгә ниндәй һорау ҡуялар?

3. Яңғыҙлыҡ исемгә нимә атамалары керә?

4. Ниндәй исемдәр уртаҡлыҡ исемдәр була?

5. Исем нимә менән үҙгәрә?

6. Башҡорт телендә нисә килеш бар?

- Уҡыусылар, беҙ исемдәрҙең ике ҙур төркөмгә бүленгәнен белдек. **«Сылбыр» уйынын** уйнап алайыҡ. Яңғыҙлыҡ исемдең һуңғы өнөнән башланған исем уйлайыҡ. Мәҫәлән, Башҡортостан-Наза-Ағиҙел-Ләлә-Әй-Йылыйыр-Рәмил һ.б. Афарин. Икенсе йоҙаҡты асыу өсөн **эйәлек затында үҙгәртеү** дөрөҫ булғанмы, дөрөҫ булмаһа дөрөҫ итеп күсереп яҙырға кәрәк.

| Берлек | | Күплек |
|---|---|---|
| 1-се зат | уның ҡалаһы | һинең ҡалаң |

2-се зат минең ҡалам беҙҙең ҡалабыҙ
3 –сө зат уларҙың ҡалалары һеҙҙең ҡалағыҙ

- Афарин. Өсөнсө йоҙаҡты асыу өсөн **йомаҡтың яуабын табайыҡ.**

Ағас баштары булды һап-һары,
Япраҡ көслө елдәрҙә өҙөлөп ергә түгелде.
Был ҡайһы ваҡыт? (Көҙ)
**Картина буйынса әңгәмә.** –
Көҙ етеүен беҙ ҡайҙан беләбеҙ?
Көҙгө айҙарға ниндәй айҙар инә?
Китаптан 85-се күнегеүҙе уҡыйыҡ. (тексты ҡысҡырып уҡыу).

а) Берлектәге исемдәрҙе күсереп алып килеш ялғауҙары аҫтына һыҙырға;
б) Күплектәге исемдәрҙе күсереп яҙып килеш ялғауҙары аҫтына һыҙырға;
в) Эйәлек ялғаулы исемдәрҙе күсереп яҙырға, ҡайһы зат, һан икәнен билдәләргә;
- Тағы бер йоҙаҡ асылды.

**Физминутка.**

*Ел сыҡты. (ҡул менән күрһәтеү)*
*Ямғыр яуа.(тыпырлау)*
*Ҡояш сыҡты.(ҡулды йәйеп күрһәтеү)*
*Төн етте.(күҙҙе йомоу).*
*Торогоҙ, торогоҙ көн тыуҙы, эштәр башланды.*

- Алтынсы йоҙаҡты асҡансы исемдәрҙең **килеш менән үҙгәреүен** иҫкә төшөрәйек.(Таблица). Хәҙер таҡта янына Лиана сыға һәм диңгеҙ һүҙен килеш менән үҙгәртә, ә ҡалғандар арыш һүҙен үҙгәртә.

- Беҙҙең йоҙаҡтарыбыҙ ҙа әҙ генә ҡалды. Алдағыһын асыр өсөн һеҙҙән иғтибар талап ителә. Түбәндәге **исемдәрҙең парҙарын**

**табығыҙ.** ( Мал-тыуар, азыҡ-түлек, еләк-емеш, аш-һыу, атай-әсәй, көн-төн, ҡатын-ҡыҙ, ир-ат, сыбыҡ-сабыҡ, кейем-һалым)

- Исем иле тағы **«Хатаны төҙәт» уйынын** тәҡдим итә.(таҡтаға яҙылған) Июньда, календарьҙе, автомобильдың, спектакльда, лагерьҙән, шампуньды, декабрьҙа, кабельды, нульға

III. Ә хәҙер **тест һорауҙарына** яуап бирәбеҙ.

**1.Исем нимәне белдерә?**

а) предметты;
б) предметтың билдәһен;
в) предметтың эшен.

**2.Исем ниндәй һорауҙарға яуап булып килә?**

а) Ниндәй? б) Кем? Нимә? в) Ни эшләй?

**3.Түбәндәге фекерләүҙең ҡайһыһы дөрөҫ?**

а) исем һүҙҙең өлөшө.
б) исем – һөйләм киҫәге.
в) исем – һүҙ төркөмө.

**4.Исем нимә менән үҙгәрә?**

а) заман; б) килеш, һан, эйәлек заты в) зат - һан.

**5.Был һүҙҙәр араһынан яңғыҙлыҡ исемде тап.**

а) игенлек б) Башҡортостан в) баш ҡала

**6. Сығанаҡ килешендәге исемде тап.**

а) болондан б) ҡуянды в) дәфтәрҙең

**7. Күплек һанда, урын-ваҡыт килешендә килгән исемде тап:**

а) баҡсала б) балаларға в) япраҡтарҙа

**8. Исемде тап:**

а) эленгән; б) элгес в) элә

**IV. Йомғаҡлау**

- Тимәк, уҡыусылар, беҙ морфология иленә сәйәхәтте алдағы дәрестәрҙә лә дауам итә алабыҙ. Беҙ бөгөн ниндәй һүҙ төркөмөн ҡабатланыҡ? Исем һүҙ төркөмө нимәләр менән үҙгәрә? (исемдең грамматик моделен төҙөү)

- Афарин. Ә хәҙер өйгә эште көндәлектәрегеҙгә яҙып ҡуйығыҙ. 83 – сө күнегеү, 61 бит. Бөгөн дәрестә актив ҡатнашып, һорауҙарға дөрөҫ яуап биргән … бишле, …. дүртле билдәһе ҡуям. Дәрес бөттө, сығырға мөмкин.

